**ҺАУЛЫҠ ҺАҠЛАУ**...5

### Таныш булығыҙ: “Конвасэл”!

Прививканан һуң быңдай кеше сирләмәйәсәк, тиҙәр



**ФЕСТИВАЛДӘР**..12-13

### “Ер ҡото”нда – халыҡ дауалаусылары

Билдәле им-томсолар тәүге тапҡыр бергә йыйылды

**ӘҘӘБИ МИРАҪ**.....16

### Әҫәрҙәре – яҡташтары күңелендә

Яугир ватандашыбыҙ һуғыш хаҡында күп һәм ысынын яҙҙы




**ПРОГРАММАҺЫ**
21-22


# Башҡортостан

Гәзитте ойоштороусылар – Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы – Ҡоролтай, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте

BASHGAZET.RU

1917 йылдың 14 июненән сыға

РЕСПУБЛИКАНЫҢ ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ ҺӘМ МӘҘӘНИ ГӘЗИТЕ

12+

№ 57 (27959)

2022 йыл, 22 июль, ЙОМА


**ХЕҘМӘТТӘШЛЕК** Луганскиҙа Башҡортостан стоматологтары 1774 пациентты ҡабул иткән

# Бала йылмайыуы бәхет ул

✍ Лилиә НУРЕТДИНОВА

**Луганск Халыҡ Республикаһының Красный Луч ҡалаһына ебәрелгән етенсе гуманитар автоколоннаһы составында Өфө ҡалаһының 3-сө балалар стоматологияһы поликлиникаһының “Толпар” күсмә стоматология комплексы ла бар ине. Эш сәфәрендә булған табиптар ошо көндәрҙә баш ҡалаға кире әйләнеп ҡайтты.**

Поликлиниканың баш табибы, Волга буйы федераль округының, Башҡортостандың штаттан тыш баш балалар стоматологы Римма Ғәниева, медицина-профилактика бүлеге мөдире, балалар стоматологы Лилиә Исмәғилева, шәфҡәт туташы Гөлнара Кочеганова һәм водитель Руслан Ғибәҙуллин стоматология поликлиникаһының балалар бүлеге өсөн заманса ҡорамалдар, махсус ҡоралдар алып барыуҙан тыш, Луганск Республикаһындағы хеҙмәттәштәренә ҙур методик ярҙам күрһәтеп ҡайта. Бынан тыш, хеҙмәттәшлек ептәрен нығытып, бәйләнеште өҙмәй, әле лә видеоконференция аша аралашып, кәңәштәрен йәлләмәй эшләүен дауам итәләр. Был саралар ике яҡ төҙөгән килешеү һәм бергәләп иғлан иткән “Донъя йылмайыуы” проекты сиктәрендә тормошҡа ашырыла.

— Гуманитар ярҙамдан тыш, Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы Ҡыҙыл Луч ҡалаһының балалар стоматология хеҙмәте торошон өйрәнеүҙе йөкмәтте. Луганскиҙа республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығының штаттан тыш педиатр-стоматологы Ольга Седых һәм министрлыҡтың өлкән белгесе Нина Оноприенко менән осраштыҡ, – тип эш сәфәре барышы тураһында һөйләне баш табип.

Римма Ғәниева белдереүенсә, туғандаш республикала балалар стоматологияһы тураһындағы ҡануниәт раҫланмағанлыҡтан, методик ярҙам күрһәтеү көн ҡаҙағына һуҡҡан мәсьәләләрҙең береһе булып тора: бергәләп ҡорамалдар стандарттарын эшләү, балаларҙы ҡабул итеү, дауалау процедураһы, дөйөм наркоз ваҡытында дауалауҙы ойоштороу һәм башҡа мәсьәләләр хәл ителгән.

(Аҙағы 2-се биттә).




Айрат Нурмөхәмәтов фотоһы.

**Поликлиниканың баш табибы Римма Ғәниева, медицина-профилактика бүлеге мөдире, балалар стоматологы Лилиә Исмәғилева, шәфҡәт туташы Гөлнара Кочеганова һәм водитель Руслан Ғибәҙуллин.**

ТОРМОШ ҺУЛЫШЫ



## Луганск балалары ял итә

“Салют” лагеры 77 кешене ҡабул иткән

Ҡалтасы районы етештереүселәре балаларға ҡунаҡҡа килеп киткән. Улар туңдырма, футболкалар бүләк иткәндәр. Проект етәксеһе Тимур Ғилмийәров белдереүенсә, сифатлы тауар етештереүселәр “Изге эштәр мәле” акцияһына ҡушылған.

## Яҡын Көнсығыш тағы ла яҡыная

✍ Гөлдәр ЯҠШЫҒОЛОВА

**Ил Президенты Владимир Путин Иранға сәфәр ҡылды. Унда әшлекле осрашыуҙарҙан һуң Рәсәй, Иран,Төркиә дәүләттәре етәкселәре берлектәге белдереү яһаны. Ошоға бәйле Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров социаль селтәрҙә яҙма ҡалдырҙы.**

“Иран Президенты менән һөйләшеүҙе беҙҙең дәүләтебеҙ башлығы юғары баһаланы. Тегерандың халыҡ-ара аренала тотҡан ролен кәметергә ярамай. Беҙҙең республика ла, һәр ваҡыттағыса, алдан уйлап эш итә. Октябрҙә Иранға барырға уйлайбыҙ. Был эш сәфәренә республика Башлығы Радий Хәбиров етәкселегендәге рәсми делегация һәм төбәктең эшлекле даирәһе әҙерләнә.

Ҡыҙыҡһыныуы булған барлыҡ эшҡыуарҙарҙы һәм предприятиеларҙы ошо бизнес-миссияға ҡушылырға саҡырабыҙ. Бының өсөн Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр министрлығына мөрәжәғәт итергә мөмкин.

Әле үк нигеҙ әҙерләнде. Беҙ бер нисә ике яҡлы осрашыу үткәрҙек. Шуны айырып билдәләгем килә: 2020 йыл менән сағыштырғанда, Рәсәй менән Иран араһындағы тауар әйләнеше 6,7 тапҡырға артты. Беҙ экспортҡа оҙатылған тауарҙар исемлеген киңәйтергә уйлайбыҙ. Иран Башҡортостан менән хеҙмәттәшлекте үҫтереү яҡлы”, – тип яҙҙы ул.

## Бында импортҡа алмашҡа канат сығаралар

✍ Лилиә ДӘҮЛӘТБӘКОВА

**Белорет металлургия комбинаты 2015 йылда импортты алмаштырырлыҡ күп ҡатлы канаттар етештереү проектын тормошҡа ашыра башлағайны. Уның хаҡы 511 миллион һум самаһы тәшкил итте.**

2016 йылда комбинат Рәсәй сәнәғәтте үҫтереү фондынан 255 миллион һумдан ашыу күләмдә льготалы заем алды. Проект хаҡының ҡалған 50 проценты – комбинаттың үҙ аҡсаһы. 2018 йылда уның нигеҙендә әр-яңы ҡорамал сафҡа индерелде. Яңы канат машинаһы 90 миллиметр диаметрлы 6-12 ҡатлы канат үрергә, әкструдер уны тотош һәм айырым өлөштәрен полимер менән көпләргә мөмкинлек бирә.

Проект канаттың полимер тышлыҡы йәнәтенән дә үҙенсәлекле, сөнки Рәсәйҙә уның әҙер формулаһы ул осорҙа булмай.

Әле Белорет металлургия комбинаты Рәсәй баҙарында сит ил аналогтарын уңышлы алмаштыра. Бындай канатҡа йөк күтәреү техникаһында, күмер, тау-мәғдән сәнәғәтендә, газ, нефть сығарыуҙа һәм башҡа тармаҡтарҙа ихтыяж ҙур. Комбинат яңы ҡорамал ярҙамында сығарған канат продукцияһы үҙебеҙҙең сәнәғәт компанияларында киң файҙаланыла, уларҙың сит ил комплектлау өлөштәренә мохтажлығын кәметергә мөмкинлек бирә.

# Өфөлә – етди үҙгәрештәр

Баш ҡаланың 450 йыллығын лайыҡлы ҡаршыларға тейешбеҙ



Фото: glavarb.ru

✍ Резеда ШӘҢГӘРӘЕВА

**Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң һәм төбәктең архитектура йөҙөнә ҡағылышлы һорауҙар буйынса кәңәшмә үткәрҙе. Унда тармаҡтың әйҙәүсе белгестәре, республиканың проект ойошмалары етәкселәре ҡатнашты.**

Кәңәшмәне асып, Башҡортостан Башлығы 2024 йылда төбәктең баш ҡалаһының 450 йыллығына әҙерлек барышындағы күләмле эштәр тураһында һөйләне.

– Пландар етди. Беҙ парктарҙы, йәмәғәт урындарын, подъездарҙы, ихата биләмәләрен яңыртабыҙ, социаль объекттар төҙөйбеҙ һәм, әлбиттә, инфраструктураны үҫтерәбеҙ, – тине Радий Хәбиров.

> “КӨНЬЯҠ ҠАПҠАЛАР” ПРОЕКТЫН БАШЛАП ТОРАБЫҘ, БИК КҮП УРАМДАРҘЫ ТӨҘӨКЛӘНДЕРӘБЕҘ.

– Өфөлә Көнсығыш сығыу юлын төҙөүҙе дауам итәбеҙ, “Көньяҡ ҡапҡалар” проектын башлап торабыҙ, бик күп урамдарҙы төҙөкләндерәбеҙ. Ҡала шулай уҡ эре социаль һәм спорт объекттары ла барлыҡҡа киләсәк – һуғыш ветерандарының республика госпитале, математика лицей-интернаты, Көрәш һарайы һәм башҡалар.

Радий Хәбиров шулай уҡ республикабыҙ баш ҡалаһында барлыҡҡа киләсәк мәҙәни-белем биреү учреждениелары концепцияһы тураһында ла һөйләне. Улар иҫәбендә – донъя кимәлендәге Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенең юғары уҡыу йорттары-ара кампусы һәм Евразия китапханаһы.

Башҡортостандың Архитекторҙар союзы идараһы рәйесе Илдар Йәһүҙин коллегалары исеменән Радий Хәбировҡа көнүҙәк һорауҙар һәм тәҡдимдәр тикшереү мөмкинлеге өсөн рәхмәт белдерҙе. “Һуңғы ике йылда Башҡортостанда етди үҙгәрештәр бара, шул иҫәптән торак пункттарҙың архитектур йөҙөндә лә. Беҙ ихлас күңелдән был эштә ҡатнашырға һәм тыуған республикабыҙға файҙа килтерергә теләйбеҙ”, – тине ул.

Башҡортостан Башлығы үҙ сиратында архитектура берләшмәһе вәкилдәре менән йышыраҡ осрашыуҙар уҙғарырға, ҡыҙыҡлы проекттарҙы, башланғыстарҙы тикшерергә тәҡдим итте.

# Бала йылмайыуы бәхет ул

(Башы 1-се биттә).

– Республикала тоторокло юк, табиптарға ошо шарттарҙа эшләргә кәрәк. Сәйәси хәл үҙ йоғонтоһон яһай. Мәҫәлән, инвалид балаларҙы ҡабул итеү менән уларҙа ауырлыҡтар килеп тыуған. Аутизм диагнозы ҡуйылған балаларҙы нисек ҡабул итергә һәм тештәрен дауаларға икән тип баш ватҡандар. Беҙҙең белгестәр ошо йәһәттән һәр яҡлап ярҙам күрһәтте. Балалар баҡсалары, мәктәптәрҙә “Һаулыҡ сәғәттәре” үткәреүҙе 2014 йылда туҡтатҡандар. Ошо матур йоланы тергеҙеп ҡайттыҡ. Хеҙмәттәштәрем менән ғорурланам. Ҙур һәм файҙалы эш атҡарҙылар. Беҙҙең поликлиника бригадаһы Рәсәй балалар стоматологтары араһынан Луганскиға тәүгеләрҙән булып барҙы һәм ундағы табиптарға ҙур ярҙам күрһәтте, – ти Римма Әскәт ҡыҙы.

Табиптар балаларҙы күсмә комплексҡа ғына түгел, урындағы стоматология клиникаларында, Красный Луч ҡалаһы эргәһендәге өс ауылда – Сафиевски, Петровский, Вахрушевкала дауалайҙар. Бөтәһе 1774 пациент ҡабул итәләр, уларҙың 85 проценты дауалауға мохтаж була.

— Совет осоронда төҙөлгән стоматология поликлиникаларында эшләнек. Объектив сәбәптәр арҡаһында бөтә ҡорамалдар иҫке һәм туҙған. Урындағы табиптар уларҙы үҙаллы яңыртырға тырыша, әммә был бик ауыр. Башҡортостандағы һымаҡ диспансерлаштырыу, балаларҙың тешен даими рәүештә ҡарау һәм күҙәтеү системаһы юҡ, — ти балалар стоматологы Лилиә Исмәғилева.

Беҙҙең табиптар билдәләүенсә, Красный Луч ҡалаһының балалар стоматологияһы поликлиникаларына тәү сиратта кадрҙар кәрәк. Бөгөн ҡалала өс кенә педиатр-табип бар. Был, әлбиттә, бик аҙ.

Эш сәфәре барышында беҙҙең табиптар “Донъя йылмайыуы” проектын ойоштороп ҡайта. Уны Римма Ғәниева, Ольга Седых һәм Ольга Трофименко берлектә тормошҡа ашырасаҡ.

— Өфө медицина-стоматология үҙәктәренең береһе директоры Александр Алалыкин, Луганск балаларына ярҙамға барасағыбыҙҙы белгәс, шунда уҡ ярҙамға килде. Мин уға урындағы табиптарҙың үтенесен белдерҙем: заманса ҡорамалдар кәрәк. Ул барыһын да үҙ иҫәбенә һатып алды.

Балалар үҫә, улар ваҡытында ярҙам һәм дауалау алырға тейеш, был хаҡта беҙ – өлкәндәр хәстәрлек күрергә тейешбеҙ. "Һуңғарак" тигән һүҙ булмаһын, – ти Римма Ғәниева.

Әйткәндәй, Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 3-сө Өфө балалар стоматология клиникаһы табиптарына дәүләт наградалары тапшырҙы, ә уның етәксеһе Римма Ғәниеваға "Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы" исеме бирелде.